*Лариса* ***АБДУЛЛИНА***



# *“Мин йәйҙәргә елəм!..”*

## *Һөйәнтөҫ хәтере*

Ниңә тағы ишетелә миңә
Ҡатындарҙың сеңләп илауы?
Тынғы бирмәй ирҙәр менән бергә
Бикле ҡалған аттың тулауы.

Үҙәгемә үтте аҡһаҡалдың
Һуңғы тапҡыр әйткән аҙаны.
Ишеткән юҡ, уҡығайным ғына
Дакотала бындай ҡазаны...

Ағинәйҙәр ниңә теҙелешеп,
Доға ҡыла ҡарап ҡиблаға?
Ниндәй ниәт менән улар һүҙен
Намаҙ эстәренә туплаған?

Сытыр-сытыр янған тирмәләрҙә
Ишетелә бала тауышы.
Был тарихи ысынбарлыҡмы ла?
Халҡын ерләр илдә яу ошо?!.

Янған тупраҡ еҫе аң томалай,
Биткә ҡуна көлдөң туҙаны.

Ҡурылып та кипкән үләндәрем
Зарлы көйҙө генә һуҙамы?

Нисәмә йыл ошо сал ҡаялар
Ыңғырашҡан кеүек һил саҡта.
Үтеп барған елме һиҫкәндерҙе...
Ҡара ергә ҡарап тонсоҡтом.

Әле генә бында урман балҡый,
Баш ҡалҡыта үлән аҡланда.
Ҡан хәтере ергә һеңмәй бит ул,
Ҡан хәтере илдә һаҡлана.

Ҡайтауаздар булып тауыш килә,
Ҡайтауазда аҙан, доғалар.
Бер ғәйепһеҙ ҡаза күргән йәндәр
Милләт асманына ҡағалар!

Ҡәүем үткәнендә ҡәһәр төҫлө
Йәшәй кеүек һаман һинең төҫ.
Башҡорт милләтенең ғазабына
Рухи һәйкәл һинме, Һөйәнтөҫ?!.

## *Мин йәйҙәргә елəм!..*

Мин барыбер һиңә йылмаям тип,
Сығып асам ҡара көҙ йөҙөн.
Күрәһеңме, тере япраҡтарым,
Мәңге йәшел ағас — мин үҙем!

Ҡыштарымда тороп ҡалғанда ла
Саф һауалар, иң саф таңдарым,
Мин йәйҙәргә елəм, йөрәгемә
Йомоп алып сафлыҡ һандалын!

Яҙҙар, әйҙә, баҙап тороп ҡалһын,
Ҡайҙа ашыға тип был затым?!.
Миҙгелендә миҙгел йәшенһә лә,
Мәңге йәшел һандал ул — ҡатын!

Мин йәйҙәргә елəм!
Юҡ, юҡ, осам!
Йәй төҫтәре — минең асылым!
Сарсауҙарым йәйге селләләрҙә,
Томраларҙа, бәлки, баҫылыр!..

## *О, театр!..*

Буталып та китте ҡиблаларым,
Ҡояш ҡалҡты, ана, Ай булып.
Бушанып та ҡалған асылымда
Үкһеҙлегем йөрөй зыу олоп...

Арынырға ине был хәлдәрҙән,
Ҡотолорға микән барынан?..
Ҡемдер берәү ымлап өндәшкәндәй,
Ҡул болғаны Моңдар ярынан.

Доға кеүек булды йөрәк һүҙе,
Сәхнә әллә үҙе манара?
Ус төбөндә был илаһи донъя,
Булмағандай йәндә һис яра.

Зөбәржәттәй булып тәүбә итәм,
Прометей ҙа булып яҡтырам!
Фатиманың мөхәббәтен тойоп,
Тоҡанырға тора ҡырҡ сыраҡ.

Икеләнеү йөрәгемде уртәй,
Эй, шундай үҙ һүҙе батырҙың!..
Өмөт нурын күреп һалдаттарҙың,
Һағышымдан ҡабат яҡтырҙым.

Ҡәкүк ояһында йәшәнем мин,
Үгәй ине халҡым бер талай...
Былай барһаң, юғалаһың, тиеп,
Бүленде бит донъя урталай.

Сәхнәләрҙән аҡҡан яҡты йырҙар
Әрнеүҙәрҙе бәреп сығара.
Туҡталҡаһын табалмаған йәнем
Яҡтылыҡҡа атын туғара.

Сат йәбешәм ошо миҙгеләмә —
Ҡеше иткән мәлем шул микән?
Сыуалып та киткән һуҡмағымды
Асылыма илткән юл микән?

О, театр!
И зиннәтле һарай —
Ғибәҙәттәр ҡыла кешеләр.
Юҡ, мин генә түгел бында килеп,
Йылынып та ҡайтҡан ишеләр.

Замананың еле китһә әгәр,
Булмышымды ергә тигеҙләп,
Ҡиләм бында йәшкә ҡойонорға,
Үҙ-үҙемде киләм мин эҙләп!

О, театр!
Мең ҡөҙрәтле һөнәр
Һәр бер һүҙгә, өнгә йән өрә.
Артистарҙың йөрәк һүҙе, гүйә,
Сафландыра беҙҙе, өшкөрә.

О, Ҡуктәрем!
Биргәнһең бит беҙгә
Ерҙә таҙарыныр саф ҡибла.
Өмөт көткәндәргә яҡты сыраҡ
Был донъяла һәр саҡ табыла!



## *Башкавдивизия*

Сыҡмаған улар диңгеҙҙән,
Сыҡмаған сал даланан,
Хасил булмаған күлдәрҙә,
Сыҡмаған ҙур ҡаланан...

Сал тарихтан атлай илдең
Етмеш ете батыры.
Эшелон булып баралар,
Атлайҙар ер аҡтарып.

Аттар менән танкыларға,
Самолеттарға ҡаршы
Ҡаның менән тупраҡ йыуып,
Шыуышып алға барсы!..

Бары алға!
Тик еңеүгә!
Кешнәп ауалар аттар.
Онтала ғәзиз кәүҙәләр,
Түләнә иң ҙур хаҡтар!

Рядовойҙар ауып ҡала,
Ятып ҡала генерал.
Йәшәү өсөн шаһит китеү —
Һинең тәғлимәт, Урал!

Яланда ҡала батырҙар,
Батырҙар ҡайта илгә!
Ҡанлы байрағын күтәреп,
Ҙур Еңеү килә ергә!

Быуаттарҙың рухын алып,
Уралдың һүҙен тотоп,
Еңелә заман дейеүе,
Михнәт күреп, ут йотоп!

Етмеш ете батыр ҡайта
Етмеш ете төбәккә.
Йөрәктәре һаман уяу,
Торғандай төҙ көбәктә!

Етмеш ете, тағы етмеш,
Тағы ла етмеш ете...
Етмеш йылдан ашыу ҡыҙҙар
Яуҙан егетен көттө,
Ҡатындар ирен көттө...

Сыҡмаған улар диңгеҙҙән,
Сыҡмаған сал даланан,
Хасил булмаған күлдәрҙә,
Сыҡмаған ҙур ҡаланан...

Ирлек бурыстарын үтәп,
Күтәреп халҡы данын,
Башкавдивизия бара,
Тупраҡҡа ҡойоп ҡанын.

Ҡабынып ҡала йондоҙҙар,
Тупраҡҡа һеңә көстәр!
Мәңгелеккә табан атлай
Мәңгегә тере ғәскәр!

## *Али Карнайҙың улы Сарим Карнайға һүҙ*

Ҡырын итеп һиңә ҡарамайым,
Эй, тартаһың мине һин, Ҡырым!
Осоп ҡына барып ҡайтыр инем —
Араларҙа меңәр саҡырым...

Ялт-ялт итә минең зиһенемдә
Ялта ҡалаһының исеме.
Ял ит тиеп саҡырғандан түгел,
Әллә бер уҙаман өсөнмө?!.

Шул тарафҡа мине тартып тора
Карнай тоҡомоноң дауамы.
“Беҙ ҡайтырбыҙ!..” — тигән атаһының
Һүҙкәйҙәре уға дауамы?!.

Ҡырымдарҙан ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына
Берәү ҡарай кеүек был яҡҡа.
Тауышында һағыш моңо сыңлай,
Ҡуҙ өҫтәлгән кеүек усаҡҡа.

Ҡырым буйҡайҙарын ҡыҙырманым,
Уйҙарымда ҡылдым сәйәхәт.
«Беҙ ҡайтырбыҙ!..» тиеп йәшәй ағай,
Йөрәгенә йомоп йәрәхәт.

## *Тоҙтүбә*

Ҡай тарафта тороп ҡалдың,
Эй, данлыҡлы Тоҙтүбә?!.
Милләтемдең ҡатҡан йәше
Ерен ҡосаҡлап үбә.

Башҡорт иле лә түгел был,
Түгел ҡаҙаҡ далаһы.
Бында ҡайтмай, килә хәҙер
Ике милләт балаһы.

“Тоҙ!” тиеп ғүмер ҡырғандар,
Тоҙ өсөн тауыш сыҡҡан.
Тоҙһоҙ аш түгел халыҡты,
Тоҙһоҙ ғәмәл йонсотҡан.

Бар бында Урал урамы,
Ишетелгәндәй телем.
Тик Тоҙтүбә, әйтерһең дә,
Ҡиҫеп алынған телем.

Йолҡоп алынған төбәк ул,
Йәшкә ҡойонған утрау.
Тоҙға ятып тыңлап ҡара,
Йөрәккә ҡаға һыҡрау.

Ҡисерегеҙ:
Ошо ерҙә
Ғүмере өҙөлгәндәр,
Тарихтарҙа аҡ тоҙ өсөн
Сиратҡа теҙелгәндәр,

Ялан аяҡлап атлайым
Һеҙҙең тоҙло күперҙән.
Аҡ тоҙ аралар йылытһын,
Нурын сәсеп был ерҙән!

Аҡ тоҙ  ап-аҡ күпер булһын
Ырымбур ерҙәрендә!
Ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәрем һөйләр
Беҙ белмәҫ серҙәрен дә.

Башҡорттар барһын ҡаҙаҡҡа,
Ҡаҙаҡтар беҙгә килһен!
Икмәк-тоҙло ике халыҡ
Дуҫлыҡ ҡәҙерен белһен!

Аҡ теләк булып ҡабынһын
Тоҙтүбәлә усаҡтар.
Ике халыҡтың дуҫлығын
Өшкөрөлгән тоҙ һаҡлар!

Яуызлыҡтың яманатын
Иләүес-тарих түгә!
Төрки донъяны ҡурсалап,
Имләүсе бул, Тоҙтүбә!

## *Башҡорт тарханы*

Ҡемдәр генә түрә, ай, булмаған,
Данламаған кемдәр илдәрен?!
Һиҙгер йөрәкле  лә  зирәк зиһен
Аңлай алыр тархан хәлдәрен.

Бер ҡулында ҡылыс уйнағанда,
Икенсеһе алған ҡурайын.
Милләтенә  яу килгәндә үҙе
Ҡалҡан булып баҫҡан турайып.

Халайыҡҡа кәрәк һүҙҙе тап та,
Ҡәрәк һүҙҙе әйт һин батшаға!
Тархан күңелендә  ҡояш сыға,
Тархан күңеленән ай баға.

Ул уң ҡулын һуҙған милләтенә!
Һул ҡулына батша таянған!
Тархандарҙың хатта  бер һүҙенән
Оло Башҡортостан уянған!

Халыҡ менән батша араһына
Күпер һалған башҡорт тарханы:
Түрәкәйҙең зирәк аҡылҡайы
Ҡөл булыуҙан илде аяны.

Ай, түрәкәй генә, түрәкәй шул!
Исемдәрен яҙған тарихҡа.
Унан ҡалған алтын аҡыл мәңге
Доға булып торор халыҡҡа!

Ул Уралдың үҙ кеүек ғорур —
Ир аҫылы, илдең ҡалҡаны.
Милләтенең аҡыл-зиһене ул —
Ҡөслө рухлы башҡорт тарханы.